Динебеҙ

**Һәр эштең үҙ тәртибе. Унан ситләшкән осраҡта был ғәмәлде уңышлы тип атап булмаҫ йә бөтөнләй килеп сыҡмаҫ, йә ҙур ауырлыҡ менән башҡарылыр, йәнә бәрәкәте булмауы ла ихтимал.**



# НИКАХ НИ ӨСӨН КӘРӘК?

Аллаһы Тәғәлә кешегә аҡыл биргән һәм уны тәрлө һөнәргә өйрәткән. Әгәр ҙә ул ошо аҡылға һәм Аллаһтың хаҡ диненә таянып йәшәһә, уның дәрәжәһе фәрештәләрҙән дә өҫтөнөрәк булыр. Уны күреп, Аллаһы Тәғәлә үҙенең фәрештәләре алдында: "быңа ҡарағыҙ, минең ҡолом миңә генә ышана, минән генә һорай, мин әйткәнсә генә йәшәй" - тип маҡтаныр. Әгәр ҙә кеше үҙ нәфсеһенә генә эйәреп йәшәһә, ул хайуандан һис тә өҫтөн түгел. Аллаһы Тәғәлә ундай кешеләр тураһында Ҡөрьән китабында былай ти: "улар хайуан һымаҡ һәм хатта хайуандан да насарыраҡ ("кәртәләр" сүрәһе, 7:179). Һәм, ысынлап та, беҙ бер хайуандың да бысраныып, иҫерек килеш юл буйында ятҡанын күргәнебеҙ юк. Улар үҙ балаһын үлтермәй, ташлап китмәй.

Никахтың да үҙ тәртибе бар. Шул тәртип боҙолһа, аҙмыштар кителә, никахтың ныҡлығы бөтә, ҡот-бәрәкәт ҡалмай. Бөгөн никах уҡытмайынса бер нисә йыл "йөрөүҙе" модаға һанап маташалар. Бер-беребеҙҙе ныҡлап өйрәнәбеҙ әле, тиҙәр. Шул арала бәғзеләре ҡарынында яңы яралған балаһын да үлтереп өлгөрә. Егеттәр иһә үҙ өҫтәренә яуаплылыҡ алмай, берәүҙәрен ташлап, икенселәрҙе "өйрәнә" башлай. Ә ҡыҙҙар нимә эшләргә белмәй, йә бер егет менән, йә икенсеһе менән боҙоҡлоҡҡа төшеп, юҡҡа сыға. Шулай "өйрәнешеп" йөрөп өйләнгән хәлдә лә күптәр ғаилә бәхетен татый алмай...

Егет менән ҡыҙға үҙ-ара мөнәсәбәтен нисек дөрөҫ ҡорорға? Ғаилә бәхетенә ҡайһылай өлгәшергә? Кем йәшәү, өйләнеү рәүешен яҡшы белә?

Был һорауҙарға яуап табыр өсөн, тәрлө гонаһтарға тартып торған нәфсебеҙҙе тыйып, һәр беребеҙ уйланырға һәм ошо һорауға яуап бирергә тейеш: кем беҙҙе был донъяға бар иткән? Эйе, күптәр "атай менән әсәй" тип яуап бирер. Ләкин шуны беләбеҙ: берәү нимәлер эшләһә, ул шул әйберен ҡабаттан сығара ала. Мәҫәлән, Рәсүл бер мәртәбә ултырғыс яһаһа, шундай уҡты тағы ла эшләй алыр.

Әгәр ҙә ул ата-әсәһенә, минең кеүек Рәсүлде эшләп бирегеҙ, тиһә, улар быны булдыра алмаҫ. Сөнки әсәй кеше ҡарынында ҡыҙмы, улмы икәнен дә белмәй. Шулай итеп, Аллаһ ҡына беҙҙе тулыһынса белә, шул иҫәптән: беҙгә нисек йәшәргә, нисек өйләнергә, нисек балалар үҫтерергә кәрәк икәнен дә. Ни өсөн? Сөнки Ул беҙҙе был донъяға бар иткән. Аллаһ берәй нәмәгә "Бул" тиһә, ул нәмә була, һәм Аллаһ бөтә нәмәне үҙ тәртибенә һалған.

Һәм, үрҙә әйтеп уҙыуыбыҙса, никахтың да Аллаһ ҡушҡан үҙ тәртибе бар. Ул боҙолһа, никах дөрөҫ булмаҫ, бәрәкәт тә килмәҫ. Нимәлә һуң уның тәртибе? Беренсенән, егет менән ҡыҙ Аллаһҡа ышаныусыларҙан булырға тейеш. Әгәр ҙә бәндә Аллаһҡа ышанмай икән, унан мәрхәмәт, шәфҡәт, сабырлыҡ, мөхәббәт, тоғролоҡ, таҙалыҡ, паҡлыҡ һәм башҡа шундай кешене кеше итә торған сифаттарҙы көрәүе бик ауыр. Берәү үҙенең дуҫынан: "Минең ҡыҙым бар, кемгә кейәүгә бирәйем икән?" - тип һораған. Дуҫы: "Иманлы егеткә бир. Ул ҡыҙыңды яратһа, ғүмер буйы яратыр, әгәр ҙә яратмаһа, Аллаһ риза булһын тип, ғүмер буйы хөрмәт итер", - тип яуап ҡайтарған.

Ысынлап та, иманлы егеттә генә ышаныс бар. Иманы ни тиклем көслөрәк, ҡатынын яратыуы ла, хөрмәт итеүе лә шуға бәрәбәр булыр. Шулай уҡ Пәйғәмбәребеҙ (саллаллаһү ғәләйһи үә сәлләм) үҙ хәҙисендә былай тигән: "Иманлы ҡатын - ул Аллаһтың егет кешегә биргән иң ҙур бүләге". Хәҙер уйлап ҡарайыҡ әле, әгәр ҙә берәй кешегә һөйгәне йәки башҡа яҡыны нимәлер бүләк итһә, ул бүләкте ҡайҙа ҡуйыр? Әлбиттә, матур бер урында, һаҡлап ҡына хөрмәтләп, саң бөртөгө лә төшөрмәй тотор. Шуға күрә, егеттең иманы ни тиклем көслөрәк булһа, ул үҙенең ҡатынына һәм балаларына ҡарата ла шул тиклем яҡшыраҡ мөнәсәбәттә булыр.

Кәләш һайлағанда ла иғтибар кәрәк. Рауза сәскәләре сүплектә үҫмәй, уны һәйбәт итеп ҡаралған баҡсаларҙан эҙләйҙәр. Пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт ғәләйһиссәләм әйткән: "Ҡыҙ кешене дүрт сифатына ҡарап алалар: байлығына, йәмәғәттә тотҡан урынына, матурлығына һәм иманына, һеҙ иманына ҡарап һайлағыҙ - бөтә яҡтан да уңышһығыҙ" (Бохари хәҙистәр йыйынтығынан). Матурлыҡ тураһында иһә Пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт (саллаллаһү ғәләйһи үә сәлләм) былай тигән: "Ҡатын кеше ирҙең күҙҙәрен шатландырып торһон".

Шулай уҡ ҡыҙ саф һәм бала таба алырлыҡ хәлдә булырға тейеш. Шуға күрә лә, ҡыҙҙар, үҙегеҙҙе һаҡлағыҙ! Хәҙерге заманда иманлы, һәйбәт, эсмәгәнтартмаған, уңған егеттәр шундай уҡ әҙәпле, иманлы ҡыҙҙарҙы ғына эҙләй. Иманлы ҡатын - Аллаһтың иң яҡшы бүләге. Тормошта ниндәй генә ауырлыҡтар килеп тыуһа ла, ул - Аллаһҡа ышаныусы, сабыр итеүсе, булғанына шөкөр ҡылыусы, иренә терәк. Иманлы ҡатынға тәү сиратта Аллаһтың унан риза булыуы мөһим. Аллаһтың ризалығына өлгәшәм тип, ул ирен дә бәхетле итә. Ә ире үҙ ҡатыны менән ҡәнәғәт булһа, ундай ҡатындың урыны Йәннәттәләр.

Ҡыҙҙар, егеттәргә оҡшарға теләп, Аллаһ әмерҙәренә ҡаршы бармағыҙ. Юҡһа Аллаһтың һеҙгә ғаилә бәхете лә, балалар бәхете лә бирмәүе мөмкин. Сөнки Ҡөрьәндә әйтелә: "Кем Аллаһҡа һәм Уның Пәйғәмбәренә буйһонмай, сиктәрҙе аша, ... уға хурлыҡлы ғазап әҙерләнгән" ("Ҡатындар" сүрәһе, 4:14). Әгәр ҙә егет кеше ысынлап та ҡыҙҙы ярата икән, ул үҙенең буласаҡ ҡатынын һаҡлап ҡына йөрөтәр, һәм үҙе лә, уның ата-әсәһе, туғандары ла тиҙерәк никах уҡытып ҡуйырға ашығырҙар.

Һәр ғаиләнең бәхете - мөхәббәт. Мөхәббәт булмаған ғаиләләр тарҡала. Аллаһ ризалығы өсөн бер-береһен яратып йәшәгән ғаиләләрҙә иһә үҙ-ара йомшаҡлыҡ, иғтибарлыҡ, мәрхәмәтлек һәм хөрмәт булыр.

Аллаһтың Ҡөрьәне һәм Мөхәммәт ғәләйһиссәләмдең сөннәте буйынса ҡоролған һәм йәшәгән ғаилә был донъяла ла, ахирәттә лә бик ҙур бәхеткә өлгәшә. Йә, Аллаһым! Беҙҙең өйләнмәгәндәребеҙгә иманлы, яратҡан ҡатындар бир! Кейәүгә сыҡмағандарыбыҙға иманлы, яратҡан ирҙәр бир! Бөтәбеҙҙе лә дөрөҫ, тура юлға күндереп, шунан алып бар! Амин!

Шиғри тулҡында

## ЙЫЛДАР АҒЫШЫ — КҮҢЕЛ ҺАҒЫШЫ

Фәниә ЧАНЫШЕВА

*Күк йөҙөндә тулы айҙы күреп,*
*Өләсәйем алды уҡынып.*
*Мунса инеп, арып ҡайтып килэм*
*Уның итәгенә тотоноп.*

*Доғаһына ҡушып бышылдай ул:*
*- Ни ҡылһаң да һинең ирекгә,*
*Яҡты донъя, һиндә йәшәп түгел,*
*Туйып булмай икән күреп тә.*

*... Киң донъяға хәҙер үҙем бағам,*
*Тирә-яғым тоташ сер генә:*
*Ниңә үлән йәшел, һауа зәңгәр,*
*Йондоҙҙар күп, ә ай бер генә,*

*Ниңә, беҙ атлаһаҡ, ул да бара,*
*Беҙ туҡталһаҡ, тора түбәлә,*
*Өләсәйҙең бөтә яуабы ла*
*Хоҙай ҡөҙрәтенә терәлә.*

*Иртәләрҙең хәйерлеһен теләп,*
*Шөкөр итеп айлы кисенә,*
*Сабыр өләсәйем мин сабыйҙы*
*Алып керә донъя эсенә:*

*- Рәхим-шәфҡәтле бул кескәйҙәргә,*
*Йомшаҡ һүҙле - ҡартҡа, олоға.*
*Төшөндөрә ерҙә һәр нәмәнең*
*Ҡапма-ҡаршы ише булыуға.*

*Ерҙә йәшәүеңә рәхмәтле бул,*
*Йәм өҫтәргә тырыш иң элек,*
*Яҡшылыҡты яманлыҡтан айыр,*
*Яуызлыҡты еңһен изгелек.*

*Рәхмәт, өләсәйем, һабаҡтарың*
*Сабый йөрәгемә уйылған,*
*Рухың, төҫөң, оло мөхәббәтең*
*Оҙата бара ғүмерем буйына.*

Гүзәл СИТДИҠОВА

## DOFA



*Йыланға ла табынғанбыҙ,*
*Торнаға табынғанбыҙ,*
*Бәндәне Алла тип белгән*
*Ҡолдарға тағылғанбыҙ.*

*Балбалдар ватылып бөткән,*
*Китаптар яндырылған,*
*"Алла - шул!" - тип инандырып*
*Портреттар яҙҙырылған.*

*Сүплеккә оса улары,*
*Үҙгәрә ҡиблалары,*
*Әйләнсек һарыҡ хәлендә*
*Әҙәмдең балалары.*

*Залимлыҡ ҡылынған һайын*
*Һылтанып заманға,*
*Ғалимдар ҙа баҙап ҡала*
*Әүерелеп томанаға.*

*Мөхәммәт! Һуңғы пәйғәмбәр,*
*Ишетеп торһаң әгәр:*
*Өммәтең яҙлығып бара,*
*Тарала ағыу зәһәр.*

*Мөхәммәт! Аллаһ Рәсүле -*
*Ишеткем килә һүҙең:*

*Онотмомо Аллаһ беҙҙе*
*Бәндәләме юҡ түҙем?!*

*Ҡай(һы) тошта аҙашҡанбыҙ ҙа*
*Ҡайҙарҙа һөрләккәнбеҙ -*
*Түҙалмай хөрләккәме лә,*
*Сыҙамай көрләккәме?*

*Сиктән тыш фәҡирлектәнме*
*Ҡылына көфөрләктәр?*
*Наҙанлыҡ баҫып киткәнме*
*Айырып саф ерлектән?*

*Иманһыҙ хәйлә алдында*
*Яҡлауһыҙ садә балаң.*
*Ҡурсала беҙҙе, Мөхәммәт,*
*Ярлыҡа беҙҙе, Аллам!*
*Амин!*